# һанашмактар

Күп кенә уйындар «башлыҡ», «көтөүсе», «йүгереүсе» һ.б. һайлауҙан башлана. Был осраҡта төрлө һанашмаҡтар ҡулланыла. Балалар түңәрәк яһап баҫалар, араларынан берәү уртаға сыға ла үҙенән башлап, һәр һүҙҙе бер кешегә тура килтереп, һанап китә. Мәҫәлән, «Ике балыҡ һуғыша, уның ҡанын кем эсә? Аҡ суҡ, ҡара суҡ, бында торма тиҙерәк сыҡ». Йәки: «Бер бабай утынға барған, тәгәрмәсе боҙолған, тәгәрмәсен йүнәтергә нисә сөй кәрәк булған?» «Булған» һүҙе туҡтаған уйынсы тиҙ генә берәй һан атай. Һанашмаҡты әйтеүсе ҡатнашыусылар буйлап бара, ошо иҫәп туҡтаған бала түңәрәктән сыға. Был эш бер кеше ҡалғансы дауам итә. Шулай уҡ көтөүсене, һуғыусыны билдәләү шыбаға тотоу аша ла атҡарыла. Ғәҙәттә, кемдең ҡулы өҫтә йәки аҫта ҡала шул көтөүсе, йәки «үгеҙ» була.

Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун -
Байҙар кейә һары тун.
Һары тундың бәһәһы -
Йөҙ ҙә илле ике һум.

Гәрәй бабай юлға сыҡҡан,
Тәгәрмәсе ватылған,
Уны йүнәтеү өсөн,
Нисә сөй кәрәк булған?

Өйгә кергән бер сыпсыҡ,
Осоп йөрөй сыҡ-сырыҡ.
Сыпсыҡ, сыпсыҡ, һин сыпсыҡ!
Атлап түгел, осоп сыҡ!

Алма тәгәрәй
Ҡала тирәләй.
Кем уны тота,
Шул сығып китә.

Бер, ике, өс, дүрт,
Биш, алты, ете,
Һигеҙ, туғыҙ, ун –
Ундан –уймаҡ,
Табала – ҡоймаҡ,
Мейестә – бәлеш,
Сыҡ та йәбеш.

Ҡайында - ҡарға,
Имәндә - сыпсыҡ,
Ерҙә - йылан,
Һауала - ҡош,
Бар һин ос!

Бесәй, бесәй боçҡан,
Ике күҙен ҡыçҡан.
Ҡыçһа, беҙҙе тота алмай,
Тотор ине - етә алмай.
Бес-бес-бес.

Тор, тор, турғай,
Таң ата буғай.
Турғай, сыпсыҡ,
Һин ҡал, был сыҡ!

Гөр-гөр, гөргөрлө,
Бөтәһе лә гәүһәрле.
Ҡарға, сыпсыҡ,
Һин ҡалып тор,
Был сыҡ!

Ике балыҡ һуғыша,
Уның ҡанын кем эсә?
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, тиҙерәк сыҡ!

Бер бабай утынға барған,
Тәгәрмәсе боҙолған.
Тәгәрмәсен йүнәтергә
Нисә сөй кәрәк булған?

Ары аласыҡ, бире аласыҡ,
Ялан ҡапҡаһы шар асыҡ.
Унда сыпсыҡ, бында сыпсыҡ,
Һин дә торма, йүгереп сыҡ!

Алатыр, былатыр,
Тау яғынан таң атыр,
Алабуға-бүҙәнәк,
Ялпаҡ- ҡалпаҡ,
Ҡуян, ҡарға, сыпсыҡ,
Һин ҡал, мин сыҡ!.

Әмбәл-төмбәл,
Ҡаҙыял-ҡуҙыял,
Сидыҡ-сигәнәк,
Алабута, дегәнәк,
Майлы ҡалас,
Ярсыҡ-йорсоҡ,
Балтаңды алып,
Йүгереп сыҡ.

Төй-төй, төйлөгән,
Төндә ҡайҙа бараһың?
- Нәбиҙәргә барамын.
- Унда ни йомошоң бар?
Осоп китте, юғалды,
Башы һыуға тығылды.
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, бар сыҡ!

Бер бабай бар ине, ти,
Бар ине, ти, юҡ ине, ти,
Ас ине, ти, туҡ ине, ти,
Ике өйө бар ине, ти,
Береһе кешенеке ине, ти,
Береһе күршенеке ине, ти.
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, бар сыҡ!

Ике тәкә һөҙөшкән,
Ҡара ҡанға ҡойошҡан.
Уның ҡанын кем эскән?
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, бар сыҡ!

Тары таптым, тауыҡҡа бирҙем,
Ул миңә йомортҡа бирҙе.
Уны һалдым ҡаҙанға,
Лағыр-лоғор ҡайнарға.
Уҙем киттем баҙарға
Алтын йоҙаҡ һайларға.
Аҡ суҡ, ҡара суҡ,
Бында торма, бар сыҡ!